Тәрбиәсе ҡағыҙ битен йомарлай. Был – кәүҙәһе, икенсе йомарлаған ҡағыҙ башы. Уны ҡатыраҡ итеп йомарларға кәрәк. Ҡар бабайҙы йәбештерер өсөн, йомарланған ҡағыҙға елем һөрөтөп бер төҫтәге фонға йәбештерергә кәрәк. (Балалар эшләйҙәр). Дәрес аҙағында ҡар бабайға исем бирәләр.

Эшләнгән эштәр менән Яңы йыл байрамын да сәхнәләштерергә мөмкин. Тәрбиәсе балаларға әкиәт-диалогка инергә ярҙам итә.

ТУҒЫҘЫНСЫ ДӘРЕС

«Ҡар бабай, ҡар бабай, бигерәк матур, шуҡ бабай».

МАҠСАТ: таптарҙы фломастер менән биҙәкләү. Тәьҫирле образ тыуҙырырға өйрәтеү (шаян, күңелһеҙ, шат, ҡайғылы, моңһоу, көләс).

ЭШ: ҡар бабайҙың һүрәте.

ҠУЛЛАНМА: бер төҫтәге (тонланған) ҡағыҙ, аҡ гуашь, бумала, фломастер.

ЙЫЙАЗЛАНДЫРЫУ: ҡар бабайҙың һүрәттәре.

ӘҘӘБИӘТ: М.Бикбова «Ҡыш бабай».

МУЗЫКА: Г.Зәйнәшева һүҙҙәре, Г.Гәрәев музыкаһы «Ҡар бабай».

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Дәрестә шифыр юлдары йәки йыр менән башлап ебәрергә мөмкин.

Таптар ярҙамында ҡар бабайҙы һүрәтләү мәғәнәле образ тыуҙырырға ярҙам итә. Мәҫәлән: ҡар бабай ҡар яуғанда; ҡар бабай йүгерә; ҡар бабайҙы ел дыулата.

Бумаланың осо менән түңәрәк формаһындағы хәрәкәттәр яһау. Һүрәт төшөргән ваҡытта матур итеп түңәрәктәр яһарға, уларҙы тигеҙ итеп буяу мотлаҡ кәрәк түгел.

Тәрбиәсе балала менән эшләнгән эштәрҙе ҡарап сыға, ҡар бабайҙың кәйефен, холҡон асыҡлайҙар.

Фломастер менән биҙәү, һүрәтләү йәки төҫлө ҡағыҙҙан аппликация эшләү – мәғәнәле образ бирә белеүҙең тағы ла бер вариант.

УНЫНСЫ ДӘРЕС «Ҡышҡы урман».

МАҠСАТ: «Айырым һүрәттәр ярҙамында композиция төҙөү».

ЭШ: эштәрҙе бергәләп һүрәтләү, төҙөй белеү.

ҠУЛЛАНМА: ҙур ҡағыҙ бите, балалар эше, елеем, ҡайсы, төҫлө ҡағыҙ.

ЙЫЊАЗЛАНДЫРЫУ: Яңы йыл открыткалары, плакаттар.

ӘҘӘБИӘТ: Л. Әхмәтова «Аҡбуҙат» 2-1993 й. «Ҡышҡы урман»

МУЗЫКА: И.Шакиров һүҙҙәре һәм музыкаһы «Ҡыш килде» П.Чайковский «Вальс» («Йоҡоға талған ҡыҙ» балетынан).

ЙӨКМӘТКЕЊЕ:

Шундай матур, шундай йәмле – күр.
Ҡышҡы урман.
Ҡош эҙҙәренән һырылған
Ап-аҡ ҡар юрған.

Тәрбиәсе балалар менән бергәләшеп дөйөм композиция төҙөй. Балаларға айырым йомоштар ҡуша, нимә эшләргә тейешлектәрен аңлата, коллектив эш менән етәкселек итә. Тәрбиәсе дәрес барышында композиция төҙөү тураһында белем бирә, картина төшөнсәһен нығыта. Ниндәй формалағы картина менән төркөм биҙәргә теләйҙәр, шул форматтағы ҡағыҙ бите кәрәк буласаҡ. Картина үткән дәрестәрҙә эшләнгән балаларҙың һүрәттәре аппликация менән тулыландыра.

УН БЕРЕНСЕ ДӘРЕС «Серле боҙбармаҡтар»

МАҠСАТ: балсыҡ (пластилин) менән эшләү алымдарын үҙләштереү. Ике яғы тигеҙ булмаған (бер яҡ осо йыуан, икенсе осо нәҙек) форманы бирә белеү. Әүәләнгән эштә биҙәү алымдары ҡулланып биҙәргә өйрәтеү.

ЭШ: боҙбармаҡтарҙы әүәләү, биҙәү.

ҠУЛЛАНМА: пластилин йәки балсыҡ таҡта, ҡул аҫты материалдары, өй макеты.

ЙЫЊАЗЛАНДЫРЫУ: йомаҡтары, юрамыштар, һүрәттәр.

ӘҘӘБИӘТ: Ф.Мөхәмәтйәнов «Тәмле бутҡа», «Һөңгө», 36-сы бит.

МУЗЫКА: П.Чайковский «Вальс» («Щелкунчик» балетынан).

ЙӨКМӘТКЕЊЕ: Осҡон кеүек боҙбармаҡтар һәр саҡ кешенең ҡарашын үҙенә йәлеп итеп тора. Тәрбиәсе боҙбармаҡтарҙың төрлө ҙурлыҡта, оҙонлоҡта булыуы хаҡында һөйләй. Төрлө һынамыштар,

юрамыштар, йомаҡтар, һауа торошон, тәбиғәт үҙгәрештәрен билдәләргә ярҙам итә.

Кисен һалҡын елдәр өргәс,
Тамсылар ҡалды туңып.
Аҫылынып торҙо улар,
Ҡыйыҡта һөңгө булып.

Тәрбиәсе боҙбармаҡтарҙы пластилиндан йәки балсыҡтан әүәләргә өйрәтә, әүәләү алымдарын нығыта, ҡабатлай. Әҙер боҙбармаҡтарҙы фольга йәки муйынсаҡ менән биҙәргә була. Ул Яңы йыл бүләге булып тора, шатлыҡлы кәйеф тыуҙыра. Ысын боҙбармаҡтарға оҡшатып, уларҙы өй макетының ҡыйығына йәбештереп ҡуйырға булла. Балалар үҙҙәренең эштәренә һоҡланалар.

УН ИКЕНСЕ ДӘРЕС «Һөңгөләй төҙөлгән боҙбармаҡтар»

МАҠСАТ: геометрик фигураларҙы ҡағыҙ өҫтөндә тигеҙ итеп урынлаштырырға өйрәтеү.

ЭШ: өсмөйөштәрҙе түңәрәккә йәки дүртмөйөшкә урынлаштырыу.

ҠУЛЛАНМА: елеем, төҫлө ҡағыҙ, өлгө.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: боҙбармаҡтар төшөрөлгән һүрәттәр.

ӘҘӘБИӘТ: Ф.Мөхәмәтйәнов «Тәмле бутҡа», «Һөңгө», 36-сы бит.

МУЗЫКА: Ф.Туғыҙбаева һүҙҙәре һәм С.Сәлмәнов музыкаһы «Ҡыш»

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Тәрбиәсе төркөмө янып торған майшәм индерә. Балалар һоҡланып ҡарайҙар. Тәрбиәсе кешеләрҙең һәр саҡ утҡа табынғанлыҡтарын әйтеп үтә. боҙбармаҡтарҙың да майшәмгә оҡшаш булыуҙары хаҡында әңгәмәләшә. Үткән дәрестәге боҙбармаҡтарға иғтибарҙы йүнәлтә. Улар ниндәйҙер сер һаҡлаған кеүек. Һынамыш, юрамыштарҙы иҫкә төшөрәләр.

Тәрбиәсе балаларға ҡағыҙ битендә (дүртмөйөш, өсмөйөш, түңәрәк формала) боҙбармаҡтар ҡырҡып йәбештерергә һәм уларҙы биҙәргә тәҡдим итә.

Төрлө ҡағыҙ битендә төшөрөлгән боҙбармаҡтар менән әүәләп эшләнгән боҙбармаҡтарҙан дөйөм композиция төҙөргә була.

УН ӨСӨНСӨ ДӘРЕС «Серле боҙбармаҡтар»

МАҠСАТ: таптарҙы ике төҫтә һүрәтләү (ҡыҙыл,һары). «Манып алыу» алымы ярҙамында үҙләтереү.

ЭШ: ялҡынды ике төҫ менән һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, өлгө, гуашь, бумала.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: шыршы,уйынсыҡтары, фонарҙар.

ӘҘӘБИӘТ: Г.Юнысова «Йылғыр тупҡайым» «Аҙашмай килде». 54-се бит.

МУЗЫКА: М.Бикбова һүҙҙәре һәм музыкаһы «Шыршыҡай».

ЙӨКМӘТКЕҺЕ:

Беренсе булып урмандан
Килде байрамға шыршы.
Уйынсыҡтар ҙа эленгәс,
Бөгөн ул ниндәй ҡупшы.
Иң бейектә йондоҙ яна,
Шыршыбызға йәм биреп.
Ҡыш бабай аҙашмай килде,
Яҡты йондоҙҙар күреп.

Яңы йыл төнөндә ниндәйҙер мөғжизә көтөһең. Сөнки көтмәҫтән генә Ҡыш бабайҙың килеп инеп, бүләктәр таратыуы, Ҡарһылыуҙың өйөрөлөп-өйөрөлөп бейеп китеүе, тирә-йүнде солғап сихри тынлыҡ, тылсымлылыҡ әсир итә.

Шыршы төрлө уйынсыҡтар менән биҙәлгән. Улар шыршыла яналар, һүнәләр, балҡыйҙар, баҙлайҙар. Тәрбиәсе шыршылағы фонарҙарҙы яндырырға тәҡдим итә. Балалар уны күҙәтәләр.

Ялҡынды ике төп төҫ менән эшләргә була (ҡыҙыл һәм һары, ҡыҙыл һәм күк, һары һәм күк). Әгәр ҙә өс төҫтә лә ҡушһаҡ, ялҡыныбыҙ «һүнәсәк», һоро төҫ килеп сыға. Балалар фонарҙарҙы теләктәре буйынса төрлө биҙәктәр менән биҙәйҙәр. Эшләнгән эштәр менән төркөм бүлмәһен биҙәйҙәр.

УН ДҮРТЕНСЕ ДӘРЕС «Ҡыш бабай килде беҙгә, уйнайыҡ әле бергә»

МАҠСАТ: портрет менән таныштырыу, һүрәтләргә өйрәтеү. Ҡыш бабай портретының атрибуттарын һурәтләп бөтөрөү.

ЭШ: ҡағыҙ битендә халҡын гаммалағы һыҙыҡтарҙы һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: Яңы йыл открыткалары, һүрәттәр.

ӘҘӘБИӘТ: Яңы йыл, Ҡыш бабай тураһында шиғырҙар.

МУЗЫКА: Ф.Фәтҡуллина һүҙҙәре һәм музыкаһы «Ҡыш бабай»

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Балалар музыка дәрестәрендә Ҡыш бабай образы менән таныштыралар. Уның тураһында йырҙар, шиғырҙар, йомаҡтар өйрәнәләр. Художестволы образды ҡағыҙҙа ла тыуҙырырға мөмкин.

Тәрбиәсе Ҡыш бабайҙың йөҙөн, быймаларын, бейәләй кейгән ҡулдарын һәм башҡа өлөштәрен төшөрөп, ҡағыҙ битен сикләй. Ә балалар күҙәтәләр. Тәрбиәсе балаларға зәңгәр, күк, аҡ, йәшел, миләүшә төҫөндәге буяуҙарҙы ҡулланып, тура тулҡынлы һыҙыҡтар ярҙамында кейемен, һаҡалын, мыйығын, ҡаштарын һүрәтләргә тәҡдим итә.

Шундай уҡ алым менән Ҡарһылыуҙы ла эшләргә мөмкин. Теләгән балалар һүрәттең ҡалған өлөштәрен төшөрә алалар. Мәҫәлән: ҡар бөртөктәре, шыршылар, уйынсыҡтар. Эш коллектив менән башҡарыла.

УН БИШЕНСЕ ДӘРЕС «Ҡыш бабай килтерҙе беҙгә шыршы»

МАҠСАТ: әҙер формаларҙан һүрәт төҙөү. Аппликация күнекмәләрен өйрәнеү.

ҠУЛЛАНМА: өлгө, төҫлө ҡағыҙ, елеем, бумала, салфетка, ҡағыҙ.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: шыршы уйынсыҡтары, фонарҙар.

МУЗЫКА: Ҡ. Даян һүҙҙәре һәм З.Исмағилов музыкаһы «Яңы йыл йыры» («Щелкунчик» балетынан).

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Яңы йыл байрамын шыршыһыҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

Һаумы, һаумы, Ҡыш бабай,
Ниңә оҙаҡлап киттең?
Беҙ һине ныҡ көткәнгә
Төштәргә инеп бөттөң.

Эйе, Ҡыш бабай күстәнәсheҙ, бүләкheҙ, йөрөмәй. Ул беҙгә шундай матур шыршы килтергән.

Тәрбиәсе шыршыны ни өсөн биҙәгәнәрен төшөндөрә. Ниндәй шарҙар эленгән? (быяла ялтыр, ҙтә күренмәле, көҙгөлө). Гирляндалар бында төрлө-төрлө: электрлы, музыкаль, ҡағыҙҙан эшләнгәндәре лә бар.

Яңы йыл уйынсыҡтары балаларҙың көндәлек уйынсыҡтарынан нимәһе менән айырыла (сихри, тиҙ ватылыусан).

Балалар төҫтәрҙе ҙҙәре һайлап, ҙ теләктәре буйынса «аппликация» техникаһын ҡулланып, шаблон – шыршыға йәки шыршы ботағына уйынсыҡтар йәбештерәләр. Эште альбом битендә генә түгел, ҙурыраҡ күләмле ҡағыҙ битендә лә эшләргә була.

Дәрес аҙағында бөтә эштәрҙе планшетҡа эләләр һәм панно яһайҙар. «Яңы йыл йыры» дәресте йәмләндерәсәк кенә.

УН АЛТЫНСЫ ДӘРЕС «Шыршы уйынсыҡтары әүәләйбеҙ»

МАҠСАТ: ябай формаларҙы әүәләргә өйрәтеү (шар, тәрилкә, бау). Балсыҡ киҫәген төрлө алымдар ҡулланып әүәләү.

ЭШ: шыршы уйынсыҡтары әүәләү.

ҠУЛЛАНМА: пластилин йәки балсыҡ, ҡул аҫты материалдары.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: шыршы уйынсыҡтары.

ӘҘӘБИӘТ: Г.Юнысова «Шыршы». Йәйғор т.1 52-се бит.

МУЗЫКА: Ҡ. Даян һүҙҙәре һәм Р.Сәлмәнов музыкаһы «Шыршы». Р.Шурман «Ҡыш бабай» («Үҫмерҙәр альбомы»).

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Тәрбиәсе дәресте Г.Юнысованың «Шыршы» шиғыры йәки «Шыршы» йыры менән башлап китә ала. Балаларға ысын шыршы уйынсыҡтары күрһәтә, тотоп ҡарарға тәҡдим итә. Уйынсыҡтарҙы таныш булған башҡа предметтар менән сағыштырып ҡарайҙар. (Шар – тупҡа, алмаға, әфлисунға; тубырсыҡ – ҡыярға, йомортҡаға; боҙбармаҡтар – кишергә, орсоҡҡа оҡшаған).

Балалар шыршы уйынсыҡтарын билдәле алымдар менән әүәләйҙәр. ҡул аҫтындағы материалдарҙы ҡулланып биҙәктәр эшләйҙәр (фольга, муйынсаҡ, таяҡса, төҫлө ҡағыҙ, мамыҡ һ.б.). Эште тамамлағас, тәрбиәсе

балаларҙың үҙаллылыҡтарын, фантазияларының йәки хыялдарының бай булыуын билдәләй.

Тәрбиәсе балалар менән бергә уйынсыҡтарҙы ҡарай һәм үҙе лә ярҙамлашып, кәрәк ерендә биҙәктәр өҫтәй.

Тәрбиәсе дәрескә йомғаҡ яһай.

УН ЕТЕНСЕ ДӘРЕС «Яңы йыл биҙәктәре»

МАҠСАТ: ҡатыштырылған техника ярҙамында алымдарҙы нығытыу. Ҡағыҙ яҫылығын үҙләштереү.

ЭШ: ҡар бөртөктәрен төҫлө таптар йәки ҡәләмдәр менән һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, аҡбур, гуашь, акварель, һыу, бумала, поролон.

МУЗЫКА: Ф.Фәтҡуллина һүҙҙәре һәм музыкаһы «Шалтырауыҡ менән уйын»

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Иртәнсәк тороп, тәҙрәгә ҡараһаң, хайран ҡалырһың. Тәҙрәлә төрлө матур биҙәктәр: япраҡтар, үләндәр, йылғалағы аҡ томбойоҡтар, ҡамыштар күренә кеүек. Әйтерһең дә бар ағастар ботаҡтарын йәйгән. Ә инде биҙәктәр төрлө булһа ла, төҫтәре Бер – аҡ. шулай ҡупшылап Ҡыш бабай һүрәт төшөргән, ергә ҡар бөртөктәрен һипкән. Улар төрлө төҫкә инеп ем-ем итеп емелдәй.

Тәрбиәсе балаларға төҫлө һәм аҡ аҡбур менән ҡар бөртөктәрен төшөрөргә тәҡдим итә.

Һүрәткә шыйыҡ гуашь йәки акварель менән төҫлө таптар һалырға була. Ҡар бөртөктәре асыҡ һәм байрамса күренәләр.

Дәрестең йөкмәткеһен хис-тойғоларға байытырға, биҙәргә әҙәбиәт һәм музыкаль әҫәрҙәр ярҙам итәсәк.

Эштәрҙе ҡарап төркөм бүлмәһенә элеп ҡуйырға мөмкин. Х.Ғиләжевтың «Тәҙрәләге биҙәктәр» тигән шиғырын ҡулланырға була.

УН ҺИГЕҘЕНСЕ ДӘРЕС «Беҙ байрам көтәбеҙ»

МАҠСАТ: дәрестәрҙә өйрәнгәнде нығытыу. Блокта өйрәнгәнде дөйөмләштереү.

ЭШ: төркөм бүлмәһен биҙәү.

ҠУЛЛАНМА: балалар эше, елем, бумала.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: блок буйынса балалар эштәре.

ӘҘӘБИӘТ: Яңы йыл тураһында шиғырҙар.

МУЗЫКА: Яңы йыл йырҙары.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ: Көн һайын беҙ матур, таҙа кейемдә йөрөйбөҙ, ә байрамда байрам күлдәге кейәбеҙ. Байрам көндә өҫтәлгә лә әллә күпме татлы ризыҡ бешерәбеҙ. Шаярабыҙ, бейейбеҙ, ҡыуанабыҙ, сөнки бөгөн

байрам. Тәрбиәсе байрам көндәренең көндәлек тормошонан айрылып тороуын аңлата.

Тәрбиәсе балалар менән бергә үткән дәрестәрҙәге эштәр менән төркөм бүлмәһен биҙәй. Байрамға кәрәк битлектәр, атрибуттар әҙерләйҙәр. Байрамға ҡүңелле, байрамса кәйеф тыуҙырыла, уларҙың күңелдәре күтәрелә, әкиәттәр һөйләшәләр, йырҙар йырлайҙар. Яңы йыл костюмдарын кейеп ҡарайҙар. Өмөттәр, хыялдар, маҡсаттар ошо байрам көнөндә серле бер тылсымға әйләеп, күңелгә май булып ята.

III БЛОК

Тема: «Һәр кемдең ҙә өйө…»

БЕРЕНСЕ ДӘРЕС «Мин йәшәгән йорт»

МАҠСАТ: балаларға буй һәм арҡыры һыҙыҡтарҙы төшөрөргә өйрәтеү, тура мөйөшлө форманы төшөрөү.

ЭШ: тәҙрәләр, өйҙәр, төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: гуашь, бумала, ҡағыҙ.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: ауыл һәм ҡала архитектураһы төшөрөлгән рәсемдәр, слайдттар.

ӘҘӘБИӘТ: Ф.Мөхәмәтйәнов «Ут тоҡанғас»

МУЗЫКА: Р.Сәлмәнов һүҙҙәре һәм музыкаһы «Беҙҙең йортобоҙ». Еңел, күңелле көйҙәр.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ:

Беҙ йәшәйбеҙ бейек йортта,
Ике урам сатында.
Йортобоҙ көлә лә көлә,
Ҡояш күктә сағында
Кисен йоҡоһо килгәндәй,
Бойоғоп ҡала үҙе.
Тик йоҡоһон бик тиҙ аса,
Ут тоҡанғас йөҙ күҙе.

Йәнлектәр ҡайҙа йәшәй? Ҡоштар, әкиәт геройҙары ҡайҙа йәшәй?

Тәрбиәсе балаларҙың ҡайҙа йәшәүҙәре, ғаилә ағзалары тураһында әңгәмә үткәрә. Тәрбиәсе диалог ярҙамында балаларға үҙ фекерҙәрен әйтеп бирергә ярҙам итә. Өйҙәренең төрлө булыуына иғтибар итә (ҙур тәҙрәләре, ишектәре,стеналары,ҡыйығы һ.б.).

Тәрбиәсе тура мөйөшлө формаларҙы төшөрөү ысулдарын күрһәтә; өйҙәр төшөрөлгән слайдтар, рәсемдәр ҡарарға мөмкин.

- Ниндәй өйҙә йәшәргә теләр инең?
- Үҙеңдең йортоңдо рәсемгә төшөр.

Дәрес аҙағында бөтә эштәр ҙә ҡарала, тәрбиәсе балаларҙың йәшәгән урындары тураһында һораша.

ДҮРТЕНСЕ ДӘРЕС «Шаян бесәй балалары»

МАҠСАТ: тулы ҡағыҙ битен ҡулланып, бер йөкмәткегә берләштерелгән композиция өҫтөндә эшләү.

ЭШ: үткән дәрестәге эштәргә рәсем өҫтәйҙәр йәки йәбештерәләр.

ҠУЛЛАНМА: төҫлө ҡағыҙҙар, елем, фломастер, үткән дәрестәге эштәр, ҡул аҫтындағы әйберҙәр.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: бесәй балалары төшөрөлгән бағышһүрәттәр, слайдтар.

ӘҘӘБИӘТ: Р.Абуталипова «Бесәй», Р.Байымов «Бесәй менән сысҡан».

МУЗЫКА: Ә. Зиннурованың еңел көйҙәре Ҡ.Даян һүҙҙәре, Р.Сөләймәнов музыкаһы «Бесәй әле кескәй шул».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балаларға бесәй балаһының йоморо икмәк менән осрашыуы тураһында һөйләй. Бесәй йомғаҡ менән уйнарға була һәм уны һуҡмаҡ буйлап тәгәрәтә башлай. Уң тәпәйе менән дә, һул тәпәйе менән дә тәгәрәтә, фокустар эшләй, йомғаҡ бесәйҙән йәшенә. Тик бушҡа ғына бәләкәйләнә барып, йомғаҡ бөтөнләйгә һүрелде, оҙон-оҙон еп барлыҡҡа килде.

Тәрбиәсе балаларға «үҙ бесәйҙәренә» уйынсыҡтар, атрибуттар, биҙәнеү элементтары һайларға тәҡдим итә. (Епкә бәйләнгән, йомарланған ҡағыҙ, таҫма, туп, йөн йомғаҡ – бесәй балалары уйнарға яратҡан әйберҙәр).

Тәрбиәсе үткән дәрестәге эштәрҙе ошо әйберҙәр менән тулыландырырға тәҡдим итә. Балалар уйнар өсөн кәрәкле әйберҙәрҙе фломастер менән төшөрәләр йәки «үҙ бесәйҙәренә» ҡул аҫтында булған төҫлө таҫмалар, ептәр, ҡорамыштар йәбештерәләр.

Дәрес аҙағында бөтә эштәр ҙә ҡарала, балалар үҙ эштәрендә ҡарап һоҡланалар, бесәй балаларына исем ҡушалар.

БИШЕНСЕ ДӘРЕС «Әкиәт геройҙары»

МАҠСАТ: төҫтәрҙең рәсем төшөрөүҙә баҙыҡ ролен аңлата белеү, таптарҙа хайуандар төшөрөү. Төҫ һәм һыҙыҡтар ярҙамында асыҡ итеп йөҙ булдырыу.

ЭШ: әкиәттә ҡатнашыусыларҙың рәсемен төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, бумала, гуашь, һыу.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: әкиәттәрҙең бағышһүрәттәре.

ӘҘӘБИӘТ: башҡорт халыҡ әкиәттәре.

МУЗЫКА: уйынсыҡ музыка ҡоралдарынан импровизация (бубен, шалтырауыҡ, маракас, ҡыңғырау һ.б.).

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балаларға таныш һамаҡтар, әкиәттәр, уларҙың ҡатнашыусыларын иҫкә төшөрә. Йомро икмәк ниндәй? (шатлыҡлы, ҡайғыһыҙ, алсаҡ). Төлкө ниндәй? (шатлыҡлы, ҡайғыһыҙ, алсаҡ). Төлкө ниндәй? (хәйләкәр, ҡылансыҡ һ.б.)

Әкиәт геройҙарын һанағанда, уларҙың ҡайһыһы яҡшы, ҡайһыһы уҫал икәнен әйтеп китеү мотлаҡ. Төрлө тауыштар ярҙамында геройҙың характерын, уның үҙенсәлекле яҡтарын күрһәтеү (йомро икмәк тәгәрәй – таяҡ менән металлофон буйлап шыуыу; ҡуян һикерә – ҡыңғырауҙың айырым тауыштары; ҡоштар суҡый – маракас тауышы).

Балалар йәнлек-ҡоштарҙың ҡыланышы тураһында һөйләйҙәр, ҡылығын баһалайҙар – яман, яҡшы.

Тәрбиәсе балаларға яҡты, таҙа, асыҡ төҫтәр менән ыңғай образдар төшөрөргә тәҡдим итә. Балалар үҙҙәренең теләге буйынса әкиәттә ҡатнашыусыларҙың рәсемен төшөрәләр. Дәрес аҙағында ниндәй әкиәт геройы төшөрөүе тураһында һөйләйҙәр.

АЛТЫНСЫ ДӘРЕС «Йәнле тамсылар»

МАҠСАТ: балаларҙың үҙ хыялдарын, фантазияларын рәсем Аша күрһәтеү. Һыҙыҡтарҙы яман, яҡшы образдарҙы булдырыуҙа тотҡан урыны тураһында аңлатыу.

ЭШ: «Йәнле тамсылар» төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: бумала, ҡағыҙ, фломастер, ҡәләмдәр, аҡбур, гуашь.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: тәрбиәсенең рәсеме.

ӘҘӘБИӘТ: Р.Ситдиҡова «Бапаҡ».
МУЗЫКА: Р.Шуман музыкаһы «Ҡыш бабай».
ЙӨКМӘТКЕһЕ:

«Бапаҡ һүрәтен бөгөн яһаным,
Күҙҙәре – өсәү, дүртәү танауы.
Бишәү ҡулдары, алтау – аяғы.
Йәшелле-күкле йөҙө, яңағы.
Ете ҡолаҡлы икән был «кеше».
Тик мин уларын торманым эшләп, -
Яңғыҙым саҡта, йә алыр тешләп».

Тәрбиәсе шиғырҙы уҡый (һөйләй), шул уҡ ваҡытта уның йөкмәткеһен рәсемгә төшөрә, ә «бапаҡты» түңәрәк һыҙыҡтар менән эшләй. Балалар тәрбиәсе тауышының баҫымы, интонацияһы ярҙамында «бапаҡтың» образын хәрәкәттәрен, ҡиәфәтен билдәләйҙәр. «Нимә төшөрөлгән?», «ниндәй?», «Эре тешле, ҙур ауыҙлы, күп аяҡлы, шәп йүгерә, күҙҙәре ҡурҡыныс, урлаша, ҡулдары күп».

Дәрес барышында тәрбиәсе уҫал образды график юл менән эшләүҙе асыҡлай. «Тәүҙә әйләнә һыҙыҡ төшөрәбез, күҙҙәр – нөктәләр, уларҙы түңәрәк менән уратабыҙ, аяҡ-ҡулдары – ҡыҫҡа һыҙыҡтар, сәсе боларған – штрихланған». Төҫлө балалар үҙ теләктәре менән һайлай.

ЕТЕНСЕ ДӘРЕС «Борон-борон заманда әкиәт урманында йәшәгәндәр, ти»

МАҠСАТ: рәсемдәр буйынса ижади фараздар әүәләү. Таяҡтар ярҙамында күҙ, ауыҙ эшләү, ҡул аҫтындағыҡулланмалар ярҙамында «яҡшы», «яуыз» образдарын булдырыу.

ЭШ: әкиәт персонаждарын әүәләү.

ҠУЛЛАНМА: пластилин, балсыҡ, тәбиғәт, ҡул аҫты һәм ташланма материалдар, таҡталар.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: үткән дәрестәге һүрәттәр.

ӘҘӘБИӘТ: яҡшылыҡ, яуызлыҡ тураһында әкиәттәр «Ҡуян менән арыҫлан».

МУЗЫКА: С.Прокофьев «Бүре темаһы», «Ҡошсоҡ темаһы». Р.Ураҡсина һүҙҙәре һәм Ә. Зиннурова музыкаһы «Бүреләр» һәм «Ҡуяндар».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: «Әрһеҙ ҡунаҡ»

Ҡуянбикә Бүребайҙы
Саҡырған, ти, ҡунаҡҡа.
Һәр төрлө ашын ҡуйған,
Шәкәрле сәйен ҡойған.
- Ҡунаҡтамын, - тимәгән,
Бүре оят белмәгән.
Һыпырған, ти бар нәмәне,
Гүйә аш-һыу күрмәгән,!
Һыйы бөткән, һыу бөткән,

Ҡуян ҡалған ҡурҡыуға.
Бындай әрһеҙ ҡунаҡтан
Нисек һуң ҡотолорға?

Тәрбиәсе балалар менән берлектә үткән дәрестәге һүрәттәрҙән яман, яҡшы әкиәт образдарын дөйөмләштерәләр. Ул шифыр, музыка ярҙамында балаларҙа күләмле ижади образ тыуҙырыуға ярҙам итә.

Тәрбиәсе балаларға түңәрәк формаһын әүәләп күрһәтә. Ҡул аҫты, тәбиғәт материалдарын өҫтәп, балалар үҙҙәренең әүәләү эшен тамамлай. Ҡырҡылған йәшел ҡағыҙға – «аҡлан»ға «яҡшы» образлы, «Ҡара урман»ға – «яуыз» образлы эштәрҙе урынлаштыралар.

Дәрес аҙағында тәрбиәсе балаларға «яҡшылыҡтың» һәр ваҡыт «яуызлыҡты» еңеүе тураһында тағы бер тапҡыр әйтеп үтә. Балалар менән бергә шул турала тағы ла миҫалдар килтерергә мөмкин.

ҺИГЕҘЕНСЕ ДӘРЕС «Әкиәт йорто»

МАҠСАТ: балаларға таныш, әҙер формаларҙан ҡыйын булмаған предметтар төҙөү. Аппликация образының характерын төҫ һәм форма ярҙамында таныштырыу.

ЭШ: ҡағыҙ өйҙәргә аппликация эшләү.

ҠУЛЛАНМА: геометрик формалар, төҫлө ерлек, елеем, ҡағыҙ, салфетка.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: әкиәт өйҙәре төшөрелгән һүрәттәр.

ӘҘӘБИӘТ: «Тирмәкәй» әкиәте.

МУЗЫКА: музыкаль уйын «Кем үҙ өйөн тиҙерәк таба»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балаларға бағышһүрәттәр, әкиәт өйҙәре төшөрөлгән һүрәттәр ҡарарға тәҡдим итә. Әкиәт йорттарын бик матур итеп тасуирлайҙар. Ағастан һырлап биҙәлгән, бейек ҡыйыҡлы, бай матур күтәрмәле, ҡапҡалары матур сәскәләр менән, тәҙрә ҡапҡастары – һырлап биҙәлгән өй әкиәт йорто тип атала.

Төҫлө түңәрәк һәм ҡулланма ярҙамында балалар яҡшы һәм яуыз әкиәт персонаждарына төҫтәр һайлайҙар. Геометрик фигураларҙан өй төҙөгәндә, өйҙөң төҫө менән әкиәт геройының характеристикаһы менән архитектура араһындағы бәйләнеште күрһәтергә кәрәк (яман, яҡшы). Таҙа буяуға аҡты ҡушһаң, яуызлыҡты билдәләй.

Тәрбиәсе балаларға аппликация эшләү ҡәғиҙәләрен иҫкә төшөрә. Пластилин, уйынсыҡтар, әкиәт геройҙары ярҙамында балалар үҙҙәре һайлаған әкиәт геройҙары ярҙамында балалар үҙҙәре һайлаған әкиәт йортоноң архитектураһын һәм төҫөн нигеҙләйҙәр.

ТУҒЫҘЫНСЫ ДӘРЕС «Тайыштабан, Төлкөбикә һәм Шешҡолаҡ йәшәгәндәр, ти…»

МАҠСАТ: пластилиндан (балсыҡ), ҡул аҫты, тәбиғәт материалдарынан ҡатмарлы булмаған һын эшләү.

ЭШ: төрлө формаларҙан һындар төҙөү.

ҠУЛЛАНМА: балсыҡ, пластилин, ҡул аҫты материалдары.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: йәнһүрәттәге йәнлектәр.

ӘҘӘБИӘТ: «Тирмәкәй» әкиәте. «Йәйғор» китабы, 1986.

МУЗЫКА: музыкаль уйын «Тирмә»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Дәрес барышында тәрбиәсе балаларға, әкиәт йортонда кемдәр йәшәй икән, тигән һорау бирә. Балалар үҙҙәре белгән әкиәт геройҙарын һанап сығалар. Үткән дәрестәге теманы дауам итеп, тәрбиәсе түңәрәк формалы предметтарҙы әүәләргә өйрәтә. Пластилин киҫәген өҙөп алып ҫуҡа һалып, әйләнмәле хәрәкәт менән төрлө ҙурлыҡтағы түңәрәктәр әүәләй. Бирелгән эште традицион әүәләү ысулдары менән эшләргә, йәки ҡул аҫты һәм тәбиғәт материалдары ҡулланып, һын булдырырға мөмкин. Мәҫәлән: сиңерткә – ҡәләмгә пластилин баш йәбештерелә, ә ҡанаттары –кер ҡыҫтырғыс; ҡанаты – үтә күренмәле кәнфит ҡағыҙы; терпе – түңәрәк пластилин киҫәгенә орлоҡтарҙы сәнсеп сығыу.

Эш тамамланғас, балалар үҙҙәренең персонаждарына әкиәт йорто һайлайҙар. Тәрбиәсе балалар менән бөтә эштәрҙе лә ҡарай һәм уларҙың үҙаллылығын, ижади һәләтен билдәләп үтә.

УНЫНСЫ ДӘРЕС «Әкиәттәр донъяһында»

МАҠСАТ: «Коллаж» техникаһында эшләү һәләтен нығытыу. Предметтарҙы комопзициялы урынлаштырыуҙа үҙаллылыҡты һәм ижад һәләтен үҫтереү.

ЭШ: алдағы дәрестәге эштәрҙе монтажлау.

ҠУЛЛАНМА: ватман, үткән дәрестәге эштәр, ҡайсы, елем, ҡул аҫты һәм тәбиғәт материалдары.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: балаларҙың эштәре.

ӘҘӘБИӘТ: Һамаҡтар, әкиәттәр (тәрбиәсе үҙе һайлай).

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Серле әүерелеүҙәр, фантастик ваҡиғалар, ҡыҙыҡлы ваҡиғалар булған әкиәттәр, һамаҡтарҙы тәрбиәсе балаларҙың иҫенә төшөрә. Шулай итеп, балалар донъяһында мөғжизәләр сәскә ата: сихри әүерелеүҙәр, тәрән күк океандар, үтә алмаҫлыҡ ҡара урман, ыңғай йәнлектәр, кире бөжәктәр, матур, аҡыллы кешеләр, уҫал ҡурҡыныс йәндәр.

Уҫал һәм яҡшы персонаждарҙы, үткән дәрестәге эштәрҙе тәрбиәсе Бер йөкмәткегә берлештереп, балалар менән бергә аҙағы бәхетле бөткән әкиәт уйлайҙар.

Әкиәт өйҙәрен ҡырҡып алып, балаларҙың рәсемдәрен берләштереп ҙур бер йорт эшләргә мөмкин.

Әүәләү эштәрен өҫтәргә урынлаштырырға йәки ватманға эләктергес менән нығытырға мөмкин. Тәрбиәсе эш күләмен балаларға бүлеп бирә. Монтаж эшләгәндә һәр балаланың тәҡдиме тикшерелә. Балаларҙың эшен

кискеһен проектор нуры менән яҡтыртырға мөмкин. Балаларҙың эштәре сихри, әкиәттегесә атмосфера тыуҙыра.

УН БЕРЕНСЕ ҺӘМ УН ИКЕНСЕ ДӘРЕС «Аҡ һәм ҡара төҫтәр»

МАҠСАТ: баланың «яман», «яҡшы» категорияһына үҙ ҡарашын белдерергә, төҫ ярҙамында һындың холҡон күрһәтә белергә, төҫ ярҙамында һындың холҡон күрһәтә белергә өйрәтеү.

ЭШ: контраст төҫтәр менән фантастик һындарҙы төшөрөү һәм уларға аппликациялы өҫтәлмәләр.

ҠУЛЛАНМА: аҡ, ҡара ҡағыҙ, биттәрҙең шаблоны, гуашь, бумала, төрлө төҫтәге геометрик фигуралар, ҡағыҙ биттәре, елем, салфеткалар.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: төҫтәр тураһында ҡулланма (пособие).

ӘҘӘБИӘТ: Уйын «Көн, төн»

МУЗЫКА: П.Чайковский «Балалар альбомы»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балалар менән уйын уйнай, һуңынан йәнлектәрҙең, әкиәт персонаждарының көндөҙ һәм төндәге ҡылыҡтары тураһында төшөнсә бирә. Балалар үҙҙәренең һиҙемләүҙәрен хәрәкәт, тауыш эффекттары менән күрһәтәләр. Тәрбиәсе аҡ ҡағыҙ битен – көн, ә ҡара ҡағыҙ битен – төн тип билдәләй. Төҫлө ҡағыҙҙарҙан төшөрөлгән йөҙҙө аҡ, ҡара ҡағыҙ битенә һалалар һәм шыуҙыралар, шул ваҡытта йөҙҙөң төрлөсә үҙгәреүен күрергә мөмкин: күңелле, шатлыҡлы, ҡайғылы, тыныс, рәхимле һ.б. йөҙҙәҡүҙ танау, ауыҙҙы алмаштырып, балалар фантастик образ төҙөйҙәр һәм рәсем төшөрәләр. Практик эш ваҡытында тәрбиәсе төҫ һәм образдың характеристикаһы араһындағы бәйләнеште «Палитра» төҫлө таблица ярҙамында билдәләй, аппликация эшләү ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрә.

Тәрбиәсе икенсе дәрестә төрлө төҫлө геометрик формалағы элементтарын һайлап, төшөрөлгән һүрәткә өҫтәргә тәҡдим итә. (Түңәрәкләнгән сағыу – көн, осло, күпмөйөшлө, ҡара – төн). Контраст билдәләр һәм характеристика буйынса ҡара – төн). Контраст билдәләр һәм характеристика буйынса тамамланған эштәрҙе ҡарайҙар, тәрбиәсе төшөрөлгән һүрәткә балаларҙың үҙ ҡарашын, мөнәсәбәтен әйтергә тәҡдим итә. (Яҡшы яман, һәйбәт-насар, матур-ҡурҡыныс). Ниндәй? Нимә өсөн? Нимә эшләй? Һорауҙар диалогты активлаштырырға ярҙам итә.

УН ӨСӨНСӨ ДӘРЕС «Әсәкәйем – күҙ нурым»

МАҠСАТ: портрет элементтарын график төшөрөү. Рәсемде ҡағыҙ битенә дөрөҫ урынлаштырыу.

ЭШ: әсә портретын төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: төҫлө аҡбур, ҡағыҙ, ҡәләмдәр.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: әсәйҙәрҙең фотолары.

ӘҘӘБИӘТ: А.Йәғәфәрова «Гөлөм».

МУЗЫКА: Н.Дәүләтҡолова һүҙҙәре, Р.Ғөбәйҙуллина музыкаһы «Әсәйем, әсәкәйем»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе әсәйҙәр тураһындағы бер нисә йырҙы тыңлата. Һуңынан балалар үҙҙәренең әсәйҙәре тураһында һөйләйҙәр.

«Әсәйем сәскә ярата, мин беләм.
Тамсы гөлдәр үҫтерәм мин, һыу һибәм.
8 март байрамында
Әсәйемә бүләк иттем гөлөмдө
Шатлыҡ балҡый әсәйемдең йөҙөндә,
Зур булып үҫ гөлкәйем үҙең дә».

Балалар үҙҙәренең усы ярҙамында яҡынса биттең ҙурлығын билдәләйҙәр. Төрлө төҫ, һыҙыҡтар, штрих ярҙамында үҙ теләге буйынса рәсем төшөрәләр. Дәрес аҙағында тәрбиәсе балаларға кемдең әсәһе төшөрөлгәнен белергә тәҡдим итә, әсәйҙәрҙең фотолары балаларға ярҙам булып, рәсемдең эргәһендә ята.

УН ДҮРТЕНСЕ ДӘРЕС «Донъяның иң аҫыл сәскәләре – әсәйемә бүләккә»

МАҠСАТ: ҡағыҙ пластикаһы алымдары менән һынды төҫтәр, композициялар ярҙамында күрһәтеү. Йомарланған ҡағыҙҙан һәмептәрҙән композиция төҙөү.

ЭШ: сәскәләрҙән гөлләмә төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ бумала, гуашь,ептәр, елем, ҡатырға, төҫлө ҡағыҙҙар.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: сәскәләр, бөрөләнгән ботаҡтар.

ӘҘӘБИӘТ: Ф.Рәхимғолова «Беҙҙең әсәй», А.Йәғәфәрова «Гөлөм».

МУЗЫКА: Р.Ураҡсина һүҙҙәре һәм Ә.Зиннурова музыкаһы «Әсәйҙәр байрамы».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балаларға А.Йәғәфәрованың «Гөлөм» шиғырын уҡый һәм һорауҙар бирә:

- Тиҙҙән ниндәй байрам була?
- Әсәйҙәргә ниндәй бүләк әҙерләйек?

Тәрбиәсе балаларға нисек итеп бүләк әҙерләргә аңлата. Ҡағыҙ битенә төрлө асыҡ төҫтәге гуашь яғып гөлләмәләр төшөрөп, йәки йомарланған ҡағыҙҙан таптар эшләп – (был сәскә), сәскәнең һабағын – йәшел төҫтәгеептәр, япраҡтарын – ҡағыҙҙы өҙөп алыу техникаһы менән йәбештерәбеҙ

Дәрес аҙағында балалар үҙ эштәрен ҡағыҙ битенә урынлаштыралар. Һуңынан әсәйҙәр тураһында йырҙар йырлана, шиғырҙар уҡыла.

IV БЛОК

Тема «Әйберҙәр һәм төҫтәр»

БЕРЕНСЕ ДӘРЕС «Матур-матур һүрәттәр»

МАҠСАТ: ирекле һүрәт төшөрөүҙә гуашь буяуҙары палитраһының мөмкинлектәрен ҡулланыу. Композиция тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү.

ЭШ: балаларҙың теләге буйынса һүрәт төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала, ҡәләмдәр, фломастерҙар.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: өлкәнерәк балаларҙың һүрәттәре.
ӘҘӘБИӘТ: М.Сиражи «Һүрәт»
МУЗЫКА: С.Сәлимов «Туплы Яҡуп».
ЙӨКМӘТКЕһЕ: Әңгәмә: - Һин һүрәт төшөрә беләһеңме?
- Нимәләр һүрәтләр инең?
- Һүрәтте нимә менән төшөрөр инең?
- Буяуҙарҙың ниндәй төҫтәрен ҡулланыр инең?
- Ә ниндәй ҡағыҙ кәрәк булыр һиңә?
Шиғыр уҡыу:

Морат яҙа белмәһә лә
Һыҙғылай әллә ниҙер.
Мин сәскәләр төшөрәм, - ти
Яһайым, - ти – ҙур өйҙәр.
Бөгөн әйтә ул, шатланып:
- Бына юлы мин бик оҡшатып
Төшөрҙөм һүрәтемде.

Тәрбиәсе шиғыр ярҙамында балаларға тема һайлап алырға ярҙам итә.

Балалар үҙаллы эшләйҙәр.

Дәрес аҙағында тәрбиәсе балалар менән бергә һүрәттәрҙе ҡарай, уларҙың художестволы – мәғәнәүи өҫтөнлөгөн тикшерәләр. Һәр эштең исемен яҙып, һүрәттәрҙән ата-әсәләр өсөн күргәҙмә ойошторалар.

ИКЕНСЕ ДӘРЕС «Халҡыбыҙ уйынсыҡтары»

МАҠСАТ: башҡорт халыҡ уйынсығы – йөндән әүәләп яһалған (кейеҙ) туп менән таныштырыу. Төрлө төҫтәге буй киҫәктәрҙең, нөктәләрҙең бер-береһенә бик килешле тура килеүенә иғтибар бирелү. Уларҙы төрлө билдәләр менән тамғалау.

ЭШ: уйынсыҡтарҙың (туптарҙың) өлгөһөн (ҡалыбын) биҙәкләү.

ҠУЛЛАНМА: туптың ҡағыҙҙан эшләнгән өлгөһө, гуашь, бумала.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: йөн (кейеҙ) туп.

ӘҘӘБИӘТ: Р.Шакүр «Туптарым».

МУЗЫКА: башҡорт халыҡ көйҙәре.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе йөндән эшләнгән туптарҙан күргәҙмә ойоштора. Балалар туптарҙы ҡарайҙар, һоҡланыу, ҡыуаныс тойғолары белдерәләр. Тотоп уйнатып ҡарайҙар.

- Туптар нимәнән эшләнгән? Тәрбиәсе туптың йөндән, башлыса һыйыр йөнөнән йомарлап эшләнеүе тураһында аңлата. Ниндәй төҫтә? Улар нисек биҙәлгән? Биҙәктәр ниндәй төҫтәр менән һалынған?

Туптарҙың ғәҙәти түгеллеген, матурлығын ниндәйерәк һүҙҙәр менән билдәләп була? (йомшаҡ, йылы, ҡытыршы, боронғо уйынсыҡ һ.б.).

Тәрбиәсе балаларҙың яуаптарын йомғаҡлай, төҫтәрҙең дә, биҙәктәрҙең дә төрлө булыуы тураһында аңлата.

Шиғыр уҡый. Шиғыр балаларҙа туптарҙы биҙәү теләге уята.

Балалар үҙ теләктәре буйынса туптың ҡағыҙған эшләнгән ҡалбын төрлө төҫтәге буй һыҙыҡтар, түңәрәктәр, нөктәләр, таптар менән биҙәйҙәр. Тәрбиәсе эш барышында һыҙыҡтарҙың йүнәлеше тураһында иҫкәртә.

Тәрбиәсе балаларҙың эштәренә һығымта яһай, биҙәктәрҙең билдәләрен аңлата (тулҡынлы һыҙыҡ – һыу, түңәрәк – ҡояш, тура һыҙыҡ – һыу, түңәрәк – ҡояш, тура һыҙыҡ – ер һ.б.).

ӨСӨНСӨ ДӘРЕС «Илгә сығып киткәнемдә бергә ҡалды ете ҡыҙ»

МАҠСАТ: башҡорт матрешкалары менән таныштырыу. Ҡурсаҡтарҙың күлдәктәренә биҙәк һалырға, йөҙҙәрен һүрәтләргә өйрәтеү.

ЭШ: ҡурсаҡтың ҡалыбын (шаблонын) биҙәү.

ҠУЛЛАНМА: ҡалыптар, гуашь, бумала, һыу, салфеткалар.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: башҡорт халыҡ легендаһы «Ете ҡыҙ» буйынса эшләнгән ете төрлө ҡурсаҡ йәки башҡорт матрешкалары.

ӘҘӘБИӘТ: башҡорт халыҡ ижады (2 том). Риүәйәттәр, легендалар.

МУЗЫКА: башҡорт халыҡ йыры «Ете ҡыҙ».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Борон-борон заманда йәшәгәндә ти, ете ҡыҙ. Улар бик һылыу, татыу, дуҫ булғандар, гел бергә йөрөгәндәр. Ә кейемдәре күҙҙең яуын алырлыҡ сағыу биҙәкле, һоҡландырғыс булған. Был - башҡорт халыҡ кейеме. Башҡорт халыҡ кейемдәрен һанап китегеҙ. (Таҫмалы күлдәк, камзул, ҡашмау, сәсүрмес һ.б.). Ҡашмауҙы бик яратҡандар ҡыҙҙар. Ҡашмау төрлө тәңкәләр, менән биҙәлә. Күлдәктәр матур итеп таҫмалап, балитәкләп, япмалы тегелә (тәрбиәсе күлдәк өлгөләрен күрһәтеп китә). Таҫтамал төрлө төҫтә булырға тейеш.

Тәрбиәсе балаларға ҡурсаҡтар – матриешкалар менән уйнарға тәҡдим итә. Балалар уларҙы теҙеп, түңәрәккә ҡуйып, бейетеп уйната алалар. Ҡурсаҡтың йөҙҙәрендә иғтибар итәләр, кейемдәрен ҡарайҙар.

Тәрбиәсе биҙәүҙең бер нисә вариантын күрһәтә. Балалар ҡурсаҡтарҙың ҡағыҙған эшләнгән ҡалыптарын төрлө төҫтәге һыҙыҡтар, таптар менән буяйҙар. Ҡурсаҡтарҙың йөҙөн һүрәтләйҙәр (уйсан, моңһоу, шатлыҡлы һ.б.).

Әҙер эштәр менән төрлө уйындар ойоштороргә мөмкин.

ДҮРТЕНСЕ ДӘРЕС «Матур күлдәк кейгән ҡыҙҙар бейергә төшә хәҙер»

МАҠСАТ: үткән дәрестә эшләнелгән эштәрҙән композиция төҙөү, ҡурсаҡ ҡалыптарын түңәрәккә урынлаштырыу.

ЭШ: балаларҙың эштәрен йыйыу.

ҠУЛЛАНМА: төҫләндерелгән ватман, елеем, бумала.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: ҡурсаҡтар һәм уларҙың ҡағыҙған эшләнгән, матур итеп биҙәлгән ҡалыптары.

ӘҘӘБИӘТ: М.Бикбова «Ҡурсағым». Йәйғор.

МУЗЫКА: халыҡ йыры «Беләҙегем-йөҙөгөм».

ЙӨКМӘТКЕhЕ: Тәрбиәсе ҡурсаҡтар менән уйындар ойоштора (һикертеү, бейетеү, түңәрәккә ҡуйып уйнау, һамаҡтар, һөйгөстәр әйтеү һ.б.).

Эй, ҡурсағым, ҡурсағым
Кил бергәләп уйнайыҡ.
Битеңде ҡулдарыңды
Таҙа итеп йыуайыҡ.
Күлдәгеңде кейҙереп
Сәстәреңде үрәйем.
Һине һәр саҡ һөйкөмлө,
Матур итеп күрәйем.

Балалар ватманда коллектив композиция төҙөйҙәр. Һәр бер бала үҙе биҙәгән ҡалыбын йәбештерә. Әҙер композицияны төркөм бүлмәһен биҙәү өсөн ҡулланалар.

БИШЕНСЕ ДӘРЕС «Ҡоштар килә теҙелеп»

МАҠСАТ: яҙ миҙгеленә бәйле башҡорт халҡының «Ҡарға бутҡаһы» йолаһы менән таныштырыу. Төрлө формалы ике киҫәк балсыҡтан ҡыҫыу һәм һылау ысулдары менән ҡош фигураһын әүәләү.

ЭШ: ҡош фигураһын әүәләү.

ҠУЛЛАНМА: балсыҡ, әүәләү өсөн таҡталар, еүеш сепрәктәр (салфеткалар).

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: уйынсыҡтар.

МУЗЫКА: Р.Сәлмәнов музыкаһы «Ҡоштар килә». М.Сәлимов музыкаһы «Яҙ килде».

ЙӨКМӘТКЕhЕ: Яҙ еткәс, ер ҡояштың йылы нурҙарына ҡойона, тау битләүҙәре ҡарҙан әрселгәс, ер ҡояштың йылы нурҙарына ҡойона, тау битләүҙәре ҡарҙан әрселгәс, «йылы» яҡтан ҡоштар ҡайта башлай. Ошо яҙғы матур көндәрҙең береһендә инәйҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар матур итеп байрамса кейенеп тау битләүҙәренә, йылға буйҙарына сығалар. Тәмле-тәмле ашамлыҡтар, самауыр, көршәктәрен, ҡаҙандарын да онотмайҙар. Тәбиғәт ҡосағында иркенләп ял итәләр, бутҡа бешерәләр. Бутҡа ашап, сәй эсеп, бейеп-йырлап күңел асалар. Ҡоштар туйһын, игендәр уңһын тип, теләктәр теләйҙәр. Ҡалған бутҡаны ағастарға, ергә һалып сығалар.

Тәрбиәсе балаларға уйынсыҡтарҙы ҡарарға, формаларын асыҡларға тәҡдим итә. Һуңынан балсыҡтан ҡош фигураһын әүәләү алымдарын ҡүрһәтә (тартыу, ҡыҫыу, һылау, тигеҙләү ысулдары менән).

Балалар ҡош фигураларын әүәләйҙәр. Әҙер эштәрҙе уйындарҙа ҡулланырға була.

АЛТЫНСЫ ДӘРЕС «Матур биҙәкле балаҫ»

МАҠСАТ: башҡорт халыҡ биҙәүе – сәнғәт менән таныштырыу. Бумаланың бөтә өбөрөһө менән һыҙыҡтар төшөрөү күнекмәләрен нығытыу.

ЭШ: «Балаҫка» биҙәк төшөрөү.

ҠУЛЛАНМА: ҡара төҫлө ҡағыҙ, бумала, гуашь (ҡыҙыл, һары)

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: балаҫ өлгөләре, һүрәттәр, иллюстрациялар.

МУЗЫКА: башҡорт халыҡ көйҙәре.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Башҡорт халҡы йорт-хужалыҡ әйберҙәрен төрлө биҙәктәр менән биҙәргә яратҡан. Шулай балаҫ-келәмдәрҙе лә бик зауыҡлы, сағыу төҫтәр менән биҙәгәндәр. Балаҫ сағыу, байрамса ҡупшы булырға тейеш. Балаҫтың ерлеге ҡара йәки һары төҫтә була. Иң ябай балаҫтар – буйлы түр балаҫтары.

Тәрбиәсе балаҫ өлгөләрен күрһәтә. Балалар менән бергә биҙәктәрҙең асыҡлығына иғтибар итәләр, төҫтәрҙе билдәләйҙәр.

Тәрбиәсе балаларға балаҫ биҙәү алымдарын аңлата (бумаланың бөтә өбөрөһө менән буй йәки арҡыры һыҙыҡтар эшләү).

Балалар үҙаллы эшләйҙәр. Тәрбиәсе индивидуаль рәүештә ярҙам күрһәтә ала.

Эшләнгән эштәрҙе сюжетлы-ролле уйындарҙа ҡулланырға мөмкин.

ЕТЕНСЕ ДӘРЕС «Ҡояш көлә»

МАҠСАТ: аңлайышлы образ булдырыу. Түңәрәк менән тура һыҙыҡтарҙыңбер-береһенә килешле тура килеүен һүрәтләү.

ЭШ: ҡояш һүрәтен эшләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, бумала, гуашь.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: ҡояш һүрәттәре.

ӘҘӘБИӘТ: ҡояш тураһында әйтемдәр, мәҡәлдәр (Башҡорт халыҡ ижады, 1 том). Һамаҡтар (Р. Ураҡсина «Балалар фольклоры»). Р.Зәғиҙуллин «Ҡояшбикә».

МУЗЫКА: Р.Валиева һүҙҙәре, М.Шәмсетдиновмузыкаһы «Ҡояшлы йыр».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Рәссамдар ҡояшты төрлөсә һүрәтләйҙәр. Художестволы образдар, төрлө һамаҡтар, юрамыштар, әйтемдәр ҡояш образын күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Мәҫәлән:

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Һалҡын апай, кит, кит.
Ҡояш сыҡ,
Аяҙ, ас, болот ҡас
Беҙ уйнайбыҙ, йылытҡас.

Ҡояш болотҡа байыһа, иртәгә көн насар булла.

Ҡояшты һары төҫтәге түңәрәк һәм унан таралып киткән нурҙар ярҙамында, тап менән дә һүрәтләргә була.

Ҡояшты характеры буйынса билдәләргә мөмкин (яғымлы, эҫе, ҡыҙыу…) Нимә эшләй? (йылмая, йонсоулана, йылыта, яғымлы йылыта, ҡыҙҙыра).

Тәрбиәсе ҡояшты төрлөсә һүрәтләргә тәҡдим итә. Балалар үҙҙәре эшләгән ҡояш образына матур һүҙҙәр эҙләйҙәр.

ҺИГЕҘЕНСЕ ДӘРЕС «Эх, күңелле яҙ килә, Ҡояш нурҙарын һибә!»

МАҠСАТ: ритмик рәүештә төрлө төҫтәге ҡыя һыҙыҡтар, штрихтар эшләргә өйрәтеү. Ҡағыҙ битен тулыһынса үҙләштереү.

ЭШ: ҡыя һыҙыҡтар эшләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала, һыу.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: көҙгө, йәйпәк фигуралар.

ӘҘӘБИӘТ: Р.Заһиҙуллин «Ҡояш көлә», М.Дилмөхәмәтов «Мине ҡояш уята»

МУЗЫКА: Р.Сәлмәнов «Яҙ килә».

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе балаларҙың иғтибарын ҡояш нурҙарына, унан төшкән күләгәләргә йәлеп итә. Тәрбиәсе ҡояш нуры тураһында әкиәт һөйләй. Әкиәт барышында фланелеграфта йәйпәк фигуралар һәм көҙгө ярҙамында ваҡиғаны аңлатып бара. Түбәндә әкиәт өлгөһө күрһәтелә. «Йәшәгән, ти Бер Ҡояш нуры. Ул бигерәк тә бүлмәләргә тәҙрә аша ҡарарға яратҡан. Бөтә нәмәне яҡтыртыр булған. Ҡояш нуры уйынсыҡтарҙа ла сағылған. Бер ваҡыт Ҡояш нуры яңылыш ҡына йоҡлап ятҡан Күләгә апайҙы уятҡан. Күләгә апай бик асыуланған: Ҡояш нурын бүлмәнән ҡыуып сығарған. Бүлмәлә ҡараңғы һәм күңелһеҙбулып ҡалған. Уйынсыҡтар Ҡояш нурын эҙләп тышҡа сыҡһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, төрлө төҫтәге ҡояш нурҙарын күреп ғәжәпләнеп ҡалғандар. Ҡояш нурын эҙләп тышҡа сыҡһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, төрлө төҫтәге ҡояш нурҙарын күреп ғәжәпләнеп ҡалғандар. Ҡояш нурҙары уйынсыҡтарҙы ла уйнарға саҡырғандар. Әй, күңелле булған уларға».

Балалар ҡояш нурҙарын һүрәтләйҙәр. Эштәрҙән төркөм бүлмәһендә йәки музыка залында күргәҙмә ойоштороро мөмкин.

ТУҒЫҘЫНСЫ ДӘРЕС «Ялтырауыҡ»

МАҠСАТ: ҡағыҙ битенә ритмик рәүештә таптар эшләү. Ҡағыҙ битен тулыһынса үҙләштерергә өйрәтеү. Монотипия техникаһына өйрәтеү.

ЭШ: гуашь менән көҙгө өҫтөнә эшләнгән тапты ҡағыҙ битенә күсереү.

ҠУЛЛАНМА: үткән дәрестә эшләнелгән һүрәттәр, бәләкәй көҙгөләр, гуашь, бумала, һыу.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: көҙгөгә төшкән ҡояш ятҡыһы.

ӘҘӘБИӘТ: М.Ғәли «Ҡояш ниңә ҡарай?», «Ҡыңғырауыҡлы аттар»

МУЗЫКА: зыңлау эффекты булдырыу.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе көҙгө ярҙамында ялтырауыҡтар барлыҡҡа килтерә. Ялтырауыҡты йүгереп, һикереп, стенаға туҡтатып, балалар йөҙөндә сағылдырып күрһәтә. Балалар ялтырауыҡты тоторға тырышалар.

Тәрбиәсе ялтырауыҡты тотоу ысулын күрһәтә. Ҡөҙгөнө һары төҫкә буяп ҡағыҙға күсерә. Балалар дәртләнеп ошо уҡ эште башҡалар. Ялтырауыҡтар менән төрлө уйындар ойошторалар.

УНЫНСЫ ДӘРЕС «Ҡояшбикә ағастарға йылмая»

МАҠСАТ: тәбиғәттәге үҙгәрештәр менән таныштырыу. Яҙғы ағасты һүрәтләү. Ике төҫтәге һыҙыҡтарҙы берләштереү (тоташтырыу) ысулдарына өйрәтеү.

ЭШ: ағастарҙы ике төҫтәге гуашь менән һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала, һыу.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: ҡояш макеты, яҙғы пейзаждар, ҡояш сағылдырған ағас һүрәттәре.

ӘҘӘБИӘТ: М.Бикбова «Яҙ килде». Яҙ тураһында мәҡәлдәр, һынамыштар, юрамыштар.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе яҡтылыҡ һәм күләгә менән таныштырыуҙы дауам итә. Тышта балаларҙың иғтибарын ҡояш нуры сағылған ағастарға, уларҙың ҡояшлы һәм күләгәле ваҡыттағы үҙгәрештәренә йәлеп итә.

Дәрестә ике төҫтәге һыҙыҡтарҙы берләштереү ысулдарын күрһәтә. Тәүҙә ағасты Бер төҫ менән һүрәтләй (һоро, йәшел, ҡара), һуңынан ағас буйлап һары төҫтәге һыҙыҡтар үткәрә. Балалар тәрбиәсе күрһәткән эште башҡаралар. Балаларҙың эштәренән стенд ойошторола.

УН БЕРЕНСЕ ДӘРЕС «Яңы күлдәк кейә ағастар»

МАҠСАТ: ағастарға хас булған үҙенсәлектәрҙе һүрәтләргә өйрәтеү (үлсәм, форма, япраҡтарҙың төҫө).

ЭШ: япраҡтарҙан аппликация эшләү.

ҠУЛЛАНМА: үткән дәрестәрҙең эштәре, төҫлө ҡағыҙҙан ҡырҡылған япраҡтар, елем, салфетка.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: иртә яҙҙың пейзажы, ағастарҙың һүрәттәре.

ӘҘӘБИӘТ: М.Ғәли «Яҙ башланды».

МУЗЫКА: М.Сәлимов музыкаһы «Яҙ килде» П.Чайковский «Умырзая» («Йыл миҙгелдәре»).

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Балалар, тәрбиәсе япраҡ ярған ағастарҙы күҙәтәләр. Ағастарҙың вағыраҡ япраҡтарының ҡуйыраҡ , ә эреләренең һирәк урынлашыуына иғтибар итәләр.

Тәрбиәсе балаларға үткән дәрестә эшләнгән ағастарға япраҡтар йәбештерергә йәки фломастерҙар менән буярға тәҡдим итә.

Дәрес аҙағында бөтә эштәрҙән күргәҙмә ойошторола (ата-әсәләр өсөн).

УН ИКЕНСЕ ДӘРЕС «Төрлө төҫтәге болон»

МАҠСАТ: еүеш (дымлы) ҡағыҙҙа өс төрлө буяу менән һүрәт төшөрөргә өйрәтеү. Төҫтәрҙе бергә ҡушыу (аралаштырыу).

ЭШ: сәскәләр һәм үләндәр һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ гуашь, бумала, һыу, салфетка.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: Тәбиғи шарттарҙа төшөрөлгән сәскәләр.

ӘҘӘБИӘТ: М.Ғафури «Болон», Р.Сураҡолов «Болонда».

МУЗЫКА: еңел көйҙәр.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Нимә ул болон? Ә аҡлан нимәне аңлата? Ни өсөн улар төрлө төҫтә? Аҡланда, болон-туғайҙарға нимәләр үҫә? Нимәләр йәшәй унда?

Тәрбиәсе эш алымдарын аңлата. Альбом битен тулыһынса ҡулланып буяу таптары менән сәскәләр һүрәтләй. Ә улар араһында оҙонса һыҙыҡтар ярҙамында үлән эшләп күрһәтә. Ҡағыҙ еүеш булырға тейеш. Һүрәт төшөрөү барышында еүеш ҡағыҙҙағы буяуҙарҙың бер-береһе менән ҡушылыуына иғтибар итә.

Балалар төрлө төҫтәге аҡлан һүрәтләйҙәр. Эш бөткәс, бөтә һүрәттәрҙе иҙәнгә теҙеп һалып, «сәскәле болон» яһайҙар.

УН ӨСӨНСӨ ДӘРЕС «Йәйғор»

МАҠСАТ: гуаштың төрлө төҫтәрен ҡулланып, йәйғор һүрәтен эшләргә өйрәтеү. Гуашты бер-береһе менән ҡушыу ысулын ҡулланып өҫтәлмә төҫтәр алыу.

ЭШ: йәйғор һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала, һыу, йәйғор формаһында төҫлө ҡағыҙҙарҙан эшләнгән киҫәктәр.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: йәйғор һүрәте.

ӘҘӘБИӘТ: К. Әлибаев «Ҡояшлы йәйғор ятты». Ф.Мөхәмәтйәнов «Ямғыр һәм йәйғор».

МУЗЫКА: ноталар баҫҡысы.

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Тәрбиәсе йәйғор тураһында шиғыр уҡый. Йәғор һүрәтен эшләп күрһәтә. Бының өсөн ете төҫ ҡуллана (ҡыҙыл, ҡыҙғылт-һары, һары, йәшел, зәңгәр, күк, миләүшә). Ҡыҙғылт-һары төҫөн аҡ һәм ҡыҙыл гуашты бутап килтереп сығара. Зәңгәр төҫтө аҡ менән күк гуашты ҡушып ала.

Тәрбиәсе балаларға йәйғорҙоң ете төҫөн дә төҫлө ҡағыҙҙан эшләнелгән киҫәктәр менән фланелеграфҡа һалып сығырға тәҡдим итә. Балалар үҙаллы йәйғор һүрәтен эшләйҙәр.

Тәрбиәсе балаларҙы эш барышында бумаланы таҙа итеп йыуғас ҡына икенсе төҫкә маныу тураһында иҫкәртә.

Дәрес бөткәс, стенаға һүрәтләйҙәр зур йәйғор яһап элеп ҡуялар.

УН ДҮРТЕНСЕ ДӘРЕС «Бөжәктәр ҡайҙа йәшәй?»

МАҠСАТ: үткән дәрестәрҙә алған оҫталыҡтарҙы (күсермә, ҡултамға, бармаҡ һәм ус менән) файҙаланып төрлө күренештәр тыуҙырыу. Композиция төҙөү

ЭШ: бөжәктәр һүрәтләү.

ҠУЛЛАНМА: ҡағыҙ, гуашь, бумала, һыу, төҫлө ҡәләмдәр, фломастер.

ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ: бөжәктәр тураһында йәнһүрәттәр, әкиәттәрҙән иллюстрациялар.

ӘҘӘБИӘТ: М.Дилмөхәмәтов «Сәскә менән күбәләк», Г. Валиева «Ҡырмыҫҡалар», «Ҡамҡа», К. Әлибаев «Ҡырмыҫҡа».

МУЗЫКА: Р.Ураҡсина һүҙҙәре, Ә. Зиннурова музыкаһы «Күбәләк»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Ҡатнашыусылары бөжәктәр булған йәнһүрәттәрҙе бергәләп иҫкә төшөрәләр, әкиәттәрҙән иллюстрациялар ҡарайҙар. Тышта йөрөгәндә бөжәктәргә һәм уларҙың ҡылыҡтарына иғтибар итәләр. (Ҡырмыҫҡалар бер-береһенәярҙам итәләр, ҡуңыҙҙар йәшенергә тырышалар, ҡамҡа осоп китергә ынтыла һ.б.). Дәрестә балалар бөжәктәрҙе күҙәткәндә алған белемдәре тураһында һөйләйҙәр, мөмкин булһа, йәнһүрәттән өҙөк ҡарайҙар, таныш сюжеттар буйынса әңгәмәләшәләр.

Тәрбиәсе бөжәктәрҙе һүрәтләү ысулдарын күрһәтә (бармаҡ йәки ус менән һалынған ҡултамғаға, күсермәгә ҡанаттар, мыйыҡтар, күҙҙәр эшләй).

Балалар үҙаллы бөжәктәр һүрәтләйҙәр, үҙҙәренә оҡшаған ысулды ҡулланалар. Әҙер һүрәттәрҙе ҡырҡып алып, дөйөм композиция төҙөйҙәр.

Дәрес аҙағында бубен йәки металлофон сыңлауы аҫтында бөжәктәргә оҡшатып төрлө хәрәкәттәр яһап уйнарға мөмкин.

УН БИШЕНСЕ ДӘРЕС «Тәбиғәттең барса миҙгелдәре лә беҙгә бик тә ҡәҙерле»

МАҠСАТ: композиция төҙөү. Йыл әйләнәһенә үткәрелгән дәрестәрҙең темаларын йомғаҡлау. Эштәр күргәҙмәһе ойоштороу.

ЭШ: йыл әйләнәһенә башҡарған эштәрҙән композиция төҙөү.

ҠУЛЛАНМА: балаларҙың эштәре.

ӘҘӘБИӘТ: Рөстәм һәм Фәнзил Әҙелбаевтар «Башҡорт халыҡ ижады» (1 том). М. Сиражи «Йәй»

МУЗЫКА: М. Дилмөхәмәтов һүҙҙәре, С.Сәлмәнов музыкаһы «Йәй йәмдәре»

ЙӨКМӘТКЕһЕ: Миҙгелдәр тураһында әңгәмә. Элек-электән башҡорт халҡы миҙгелдәргә төрлө исемдәр биргән: көҙ – бирем айы, әбейҙәр сыуағы, һарыса, Сөмбөлә; ҡыш – ҡуян айы, Селлә, Буранара; яҙ алым айы, Аҡман-тоҡман, Алағар, Науруз һ.б., йәй – йыйын айы һ.б.

Ҡояшҡа ла бик яғымлы итеп өндәшкәндәр: Ҡояшбикә, Ҡояш апай һ.б. Тәрбиәсе балаларға йыл миҙгелдәре тураһында белгән шиғырҙарҙы, йырҙарҙы, һамаҡтарҙы, һынамыштарҙы, юрамыштарҙы, халыҡ

әйтемдәрен иҫкә төшөрөргә ярҙам итә. Балалар йыл миҙгелдәренә бәйле төрлө уйындар уйнай алалар.

Йыл әйләнәһенә үткәрелгән дәрестәрҙә алынған мөһим төшөнсәләрҙе ҡабатлап, нығытып китергә мөмкин. (Йыл миҙгелдәре, рәссам, картина, күргәҙмә, төҫтәр, форма – буяуҙар, изгелек һәм яуызлыҡ образдары). Ошо төшөнсәләр иҫтә ҡалһын өсөн, ТРИЗ уйындары ойоштороpға ла булла («Сынйыр», «Һүҙҙәр теҙмәһе» һ.б.).

Бөтә эшләгән эштәрҙән күргәҙмә ойоштороla.

ЛИТЕРАТУРА

Казакова Т.Г. Развивайте у дошкольников творчество.- М., 1985.
Комарова Т.С. Изобразительная деятельность в детском саду: Обучение и творчество.- М.,1990.
Комарова Т.С. Обучение технике рисования.- М.,2003.
Малышева А.Н., Ермолаева Н.В. Аппликация.- Ярославль:Академия развития:академия Холдинг, 2002.
Неменский Б.М., и др. Изобразительное искусство и художественный труд.- М.,1991.
Шестакова А.В. Росток: Учебное пособие по художественно- творческому развитию детей дошкольного возраста. -Челябинск, 1996.
А. Молчева Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башҡортостандың биҙәү-ҡулланма сәнғәте.- Өфө,1995.
Балалар баҡсаһында һынлы сәнғәт теорияһы һәм методикаһы. – М., 1997
Горяева Сәнғәт донъяһына беренсе аҙымдар .- М.,1991.
Р. Фәтихов Һынлы сәнғәт терминдарына русса-башкортса һүҙлек.- Өфө, 1997
F.F Fәлиева, З.F Нафикова.Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу тәрбиә программаһы.- Өфө, 1999.

СОДЕРЖАНИЕ

Введение

Первый блок занятий «Сказки о красках и карандашах»
Второй блок занятий «В мире сказок»
Третий блок занятий «У каждого свой дом»
Четвертый блок занятий «Вещи и цветы»

Беренсе блок «Буяуҙар һәм ҡәләмдәр тураһында әкиәттәр»
Икенсе блок «Әкиәт донъяһында»
Өсөнсө блок «Һәр кемдең үҙ өйө»
Дүртенсе блок «Әйберҙәр һәм төҫтәр»